**МАУК «МЕЛЕУЗОВСКАЯ ЦБС»**
**ЦЕНТРАЛЬНАЯ БИБЛИОТЕКА**
**МЕТОДИКО – БИБЛИОГРАФИЧЕСКИЙ ОТДЕЛ**

# Воин с сердцем поэта

**К 100-летию со дня рождения писателя-журналиста Зайни Рафикова**

**МЕЛЕУЗ – 2022**

Воин с сердцем поэта : к 100-летию со дня рождения писателя-журналиста Зайни Рафикова / МАУК «Мелеузовская ЦБС» Центральная библиотека методико-библиографический отдел : сост. Р. Р. Челышева. – Мелеуз : Центральная библиотека , 2022. – 18 с. – Текст : непосредственный.

## *Уважаемые коллеги!*

11 марта 2023 года писателю-фронтовику Зайнетдину Фасхутдиновичу Рафикову исполнилось бы 100 лет. Родом он происходит из небольшой деревни Давлеткулово Стерлитамакского кантона Башкирской АССР, ныне Мелеузовского района Башкортостана, где он родился в бедной крестьянской семье. Зайнетдин Рафиков - земляк и близкий родственник писателя Булата Рафикова.

К юбилейной дате подготовлено методическое пособие «Воин с сердцем поэта» в помощь работе библиотек МАУК «Мелеузовская ЦБС». В него включены статьи из республиканских и местных газет о Зайни Рафикове на башкирском языке, подборка интернет-ресурсов и материалы, посвящённые жизни и литературному творчеству нашего земляка Зайни Рафикова и имеющие воспитательное значение для детей и подростков.

## *Страницы жизни и творчества Зайни Рафикова*

Зайни Рафиков (Зайнетдин Фасхутдинович Рафиков) родился 11 марта 1923 г. в д. Давлеткулово Мелеузовского района Башкортостана. Окончил Военнополитическую академию в Москве. Работал редактором газеты «Эфир Башкортостана».

В литературу пришел в 1960-е гг. Работал в жанрах поэзии, публицистики. Книги стихов «Люди со звездами» (1975), «Думы солдата» (1980) посвящены солдатам Советской Армии. Гражданский пафос, публицистический стиль призваны показать высокие моральные качества, нравственные устремления защитников Родины. Их интимные чувства, любовь и тоска по родным, по любимой, по малой родине воспеты автором с особой лирической теплотой. З Рафиков является автором ряда сценариев, по которым были сняты документальные кинофильмы, ставшие впоследствии популярными («Потомок Салавата», (1969); «Шаймуратов-генерал», (1979), сборников воспоминаний и очерков «Человек с щедрой душой» (1989), «Пять шагов в бессмертие» (1998).

Литературно-творческой деятельностью Зайни Рафиков стал заниматься еще в годы учебы в Нурдавлетовской семилетней школе, которую успешно закончил при моральной и материальной поддержке директора школы Альмухаметова А.К. В педагогическом училище, куда он потом поступил Зайнетдин Фасхутдинович участвовал в работе литературного кружка. Получив квалификацию учителя 1- 4 классов он работал в Арслановской и Кутушевской семилетних школах. В 1940 году Рафиков З. был призван в ряды Красной Армии.

К преподавательской деятельности он вернулся лишь через два года после окончания Великой Отечественной войны. С 1947-1948 гг. он был директором Мелеузовской татарской школы. В 1949 году он повторно был призван в Армию. Затем была учеба на редакторском факультете Военно-политической академии им. Ленина.

С 1958 по 1964 год служба в Венгерской народной республике. Даже на службе он находил время для литературного творчества. Находясь в Венгрии, он перевел на башкирский язык мадьярские народные сказки. В 1963 году вместе Д. Киекбаевым издал их. В отставку он вышел лишь в 1969 году и в течение 19 лет работал в государственном комитете по телевидению и радиовещанию. Произведения Зайни Рафикова пронизаны патриотизмом, любовью к своему родному краю. Не случайно он выступил в качестве составителя, редактора и автором многих материалов сборника «Земля мелеузовская: былое, будни, будущее». Книга вышла в 2000 году и была встречена читателями с одобрением. З. Ф. Рафиков был почетным гражданином города Мелеуза.

В 2002 году Зайни Рафиков стал лауреатом премии им. Булата Рафикова.

Произведения Зайни Рафикова в фонде МАУК «Мелеузовская ЦБС»:

1. Рафиков, З.Ф. Люди со звездами [Текст] : стихи: на баш. яз. / З. Ф. Рафиков. – Уфа: Баш. кн. изд - во, 1975. – 96 с.

2. Рафиков, З.Ф. Пять шагов в бессмертие [Текст] : воспоминания и очерки: на баш. яз. / З. Ф. Рафиков. – Уфа: Китап, 1998. – 272 с.

3. Рафиков, З. Имперская канцелярия взята! [Текст] / Зайни Рафиков. // Этот день Победы. – Уфа: Китап, 1995. – С. 284 – 307.

4. Рафиков, З. Они были первыми [Текст] : очерк / Зайни Рафиков. // Этот день Победы. – Уфа: Китап, 1995. – С. 162 – 178.

5. Рафиков, Б. З. Башкиры [Текст] : отрывок из поэмы / Б. З. Рафиков // Антология поэзии Башкортостана. Голоса веков. – Уфа: Китап, 2007. – С. 256 – 258.

Источники информации о Зайни Рафикове:

1. Земля мелеузовская: былое, будни, будущее [Текст]: историко-информационный сборник. - Уфа: Китап, 2000. - С. 244-243

2. Писатели земли башкирской [Текст] : С правочник / сост.: Р. Н. Баимов, Г.Н.Гареева, Р. Х. Тимергалина. – Уфа: Китап, 2006. - С. 327-328.

## *Воин с сердцем поэта*

Всю жизнь писатель-фронтовик Зайни Рафиков вспоминал Великую Отечественную войну, службу в Красной Армии. Причем для воспоминаний он находил не мрачные, а светлые краски. О том, как воевал рядом с прославленным генералом Тагиром Кусимовым, как встречали шаймуратовцы правительственную делегацию Башкортостана, с каким вниманием слушали выступление-наказ артистки Бадар Юсуповой. Как приятно было встретиться на чужбине, в Венгрии с ученым Джалилем Киекбаевым и поговорить с ним, услышать там неповторимый голос народного артиста СССР Геннадия Пищаева.

Зайни Фасхутдинович Рафиков родился 11 марта 1923 года в деревне Давлеткулово Мелеузовского района. Окончил школу. Поступил в Стерлитамакское башкирское педагогическое училище. Учил ребятишек в школах родного района.

Пришла пора джигиту Зайни Рафикову служить в Красной Армии. Красноармейцем стал он в 1940 году, а в 1946 ушел в запас. О суровом военном времени он расскажет впоследствии в книгах стихов "Люди со звездами", "Думы солдата". Стихи посвящены воинам. Литературные критики отмечают гражданский пафос его произведений, умение автора показать высокие моральные качества, нравственные устремления защитников Родины.

Только солдат с сердцем поэта мог воспеть с особой лирической теплотой чувства воинов, любовь и тоску по родным, по любимой малой родине. Обе книги изданы на башкирском языке.

После демобилизации фронтовик З. Ф. Рафиков нашел свое место в жизни. Был он директором школы в Мелеузе, заведовал отделом пропаганды и агитации в районном комитете партии. Окончил в 1947 году Стерлитамакский учительский институт.

Но не закончилась военная карьера офицера Зайни Рафикова. Нужны были армии надежные кадры. В 1949 году его снова призвали в ряды Вооруженных Сил. В 1952 - 1956 годах был Зайни Фасхутдинович слушателем Военно- политической академии имени В. И. Ленина. После окончания ее послужил выпускник в военных округах, почувствовал вкус журналистской работы в окружных газетах, преподавал военную науку. Да и самому довелось набираться уму-разуму во время длительной командировки в Венгрию в 1958-1964 годах. С 1965 года ему довелось служить в должности начальника университета марксизма-ленинизма при Уфимском гарнизонном Доме офицеров. Но в 1969 году его военная служба кончилась.

Наверное, в это время и произошло наше знакомство. Мы с его родственником Булатом Рафиковым, впоследствии известным писателем Башкортостана, работали в редакции газеты "Ленинец". Зайни Рафиков долгое время, с 1970 по 1989 год, работал на башкирском телевидении, редактировал газету "Эфир Башкортостана". Во время многочисленных неофициальных встреч с ним ловил себя на мысли, что повезло Зайни Рафикову. На башкирском телевидении он познакомился с талантливыми журналистами. И темы, о которых он рассказывал мне, воплотились в жизнь. По его сценариям были сняты документальные фильмы "Потомок Салавата", "Шаймуратов-генерал". И в Башкирском книжном издательстве появились его сборники воспоминаний и очерков "Человек с щедрой душой", "Пять шагов в бессмертие". Но это только видимая часть айсберга его журналистского и литературного творчества. Это он в очерке "Горицветы" впервые рассказал о Миннигали Губайдуллине, повторившем подвиг Александра Матросова. Это с разрешения Зайни Рафикова мы рассказали читателям "БАШвеста" о Гизии Загитове, поднявшем знамя Победы над рейхстагом. Вы помните, возможно, и подполковника Исхака Гумерова, участвовавшего в Берлинской операции и захвате Имперской канцелярии. Его имя открыл Зайни Рафиков, фронтовик, журналист, писатель. До последнего времени Зайни Фасхутдинович продолжал трудиться. Он руководил работой по созданию энциклопедической книги по Мелеузу и району. За это присвоили ему звание "Почетный гражданин города Мелеуза".

Поэты Рамиль Гарипов и Хаким Гиляжев называли Рафикова воином с сердцем поэта. Зайни Рафиков хорошо помнил войну, знал историю наших Вооруженных Сил, никому не позволял клеветать на армию. Но гибель Зайни Фасхутдинович нашел не на поле боя, а в мирном городе. Он пришел в Русский драматический театр на спектакль по повести Мустая Карима "Помилование".

Близко к сердцу принял Зайни Рафиков спектакль, разволновался, по словам жены, ушел из театра раньше. При переходе через проспект его сбила машина...

Исторические очерки о Уфе и Башкирии
ufa-gid.com›ocherki/voin-s-serdtsem-poeta.html

## *Зайни Рафиков – певец родного края*

В памяти современников Зайни Рафиков остался и как талантливый, яркий публицист, произведения которого были пронизаны патриотизмом, любовью к родному краю. Он очень много писал о жизни солдат и офицеров Советской Армии – достойных защитниках Отечества. Одним из первых он рассказал о героической судьбе Миннигали Губайдуллина, повторившего бессмертный подвиг Матросова. Оставил читателям большие очерки о наших выдающихся земляках — участниках штурма Берлина — Гази Загитове и Исхаке Гумерове.

Зайнетдин Фасхутдинович родом он происходит из небольшой деревни Давлеткулово Стерлитамакского кантона Башкирской АССР, ныне Мелеузовского района Башкортостана, где он родился 11 марта 1923 года в бедной крестьянской семье. Зайнетдин Рафиков — земляк и близкий родственник писателя Булата Рафикова.

Зайнетдин Рафиков окончил Нурдавлетовскую семилетнюю школу, еще в школе почувствовал сильное влечение к литературе и начал заниматься творческой деятельностью, пытался писать первые стихи. Затем он поступил в Стерлитамакское башкирское педагогическое училище. Здесь активно участвовал в работе литературного кружка, писал стихи для стенгазеты. Получив квалификацию учителя начальных классов, работал учителем в Арслановской и Кутушевской семилетних школах родного района. В 1940 году ушел в Красную Армию. С началом Великой Отечественной войны воевал на фронте, а в 1946 году ушел в запас.

Работал директором школы в Мелеузе, заведовал отделом пропаганды и агитации в районном комитете партии. В 1947 году успешно окончил Стерлитамакский учительский институт.

В 1949 году Зайнетдина Рафикова снова призвали в ряды Вооруженных Сил. В 1952-1956 годах он был слушателем Военно-политической академии имени В.И.Ленина в Москве. После ее окончания служил в разных военных округах, сотрудничал с окружными газетами, преподавал военную науку. В 1958-1964 годах находился в длительной командировке в Венгрии. Даже на службе он находил время для литературного творчества. В Венгрии перевел на башкирский язык мадьярские народные сказки и в 1963 году вместе Джалилем Киекбаевым издал их.

С 1965 года служил в должности начальника университета марксизма-ленинизма при Уфимском гарнизонном Доме офицеров и в 1969 году ушел в

отставку. Затем почти два десятилетия работал редактором газеты «Эфир Башкортостана».

Зайнетдин Рафиков пришел в литературу еще в 60-е годы прошлого столетия. Плодотворно работал в жанре поэзии. Его первые книги стихов «Люди со звездами» (1975), «Думы солдата» (1980) были посвящены солдатам Советской Армии и быстро нашли своего читателя. Гражданский пафос и публицистический стиль его стихотворений помогли ярко показать высокие моральные качества, нравственные устремления защитников Родины. Любовь и тоска по родным и близким, любимым, малой родине, их душевные переживания были воспеты автором с особой лирической теплотой. Свои произведения он подписывал кратко – Зайни Рафиков, под этим именем его и знали любители башкирской литературы.

В памяти современников Зайни Рафиков остался и как талантливый, яркий публицист, произведения которого были пронизаны патриотизмом, любовью к родному краю. Он очень много писал о жизни солдат и офицеров Советской Армии – достойных защитниках Отечества. Одним из первых он рассказал о героической судьбе Миннигали Губайдуллина, повторившего бессмертный подвиг Матросова. Оставил читателям большие очерки о наших выдающихся земляках — участниках штурма Берлина — Гази Загитове и Исхаке Гумерове.

Зайни Рафиков — автор сценариев, по которым были сняты документальные кинофильмы, ставшие впоследствии очень популярными — «Потомок Салавата», «Шаймуратов-генерал». Он написал сборники воспоминаний и очерков «Человек с щедрой душой» и «Пять шагов в бессмертие». Стал составителем, редактором и автором многих материалов энциклопедической книги по городу Мелеузу и Мелеузовскому району. Земляки достойно оценили его труд, который вышел в свет в 2000 году под названием «Земля мелеузовская: былое, будни, будущее», и присвоили ему высокое звание «Почетный гражданин города Мелеуза». В 2002 году Зайни Рафиков стал лауреатом премии им. Булата Рафикова.

В жизни Зайнетдин Фасхутдинович был приветливым и добрым человеком. Любил общаться с коллегами — собратьями по перу, всегда делился с молодыми журналистами своим богатым опытом. Отличался доброжелательностью и деликатностью, избегал шумных компаний, для каждого находил доброе слово участия.

Скончался он в 2007 году, попав под машину, когда возвращался с позднего спектакля. Зайнетдин Рафиков оставил о себе хорошую память своими книгами, добрыми делами, поступками, всей своей жизнью.

http://www.bashinform.ru/news/536444-zayni-rafikov-pevets-rodnogo-kraya-k-90-letiyu-so-dnya-rozhdeniya-pisatelya/

Вестник Башкортостана, 10 марта 2019

# ЯУГИР ҺӘМ ӘҘИП ЮЛЫ

Башҡортостандың байтаҡ әҙиптәре Бөйөк Ватан һуғышы фронттарында ҡыйыу һуғышты, армия сафынан ҡайтҡас, ижад эшенә тотондо. Улар иҫәбендә шағир, журналист Зәйни Рафиҡов та бар.

Зәйни (Зәйнитдин) Фәсҡитдин улы Рафиҡов 1923 йылдың 11 мартында Мәләүез районының Дәүләткол ауылында донъяға килә. 1934 йылда — башланғыс мәктәпте, 1937 йылда Нурдәүләт тулы булмаған урта мәктәбен Мәктау грамотаһы менән тамамлай. Шул уҡ йылда Стәрлетамаҡ башҡорт педагогия училищеһына уҡырға инә. Уны тамамлағас, тыуған районының Арыҫлан һәм Ҡотош мәктәптәрендә уҡытыусы булып эшләй. 1940—1946 йылдарҙа Совет Ҡораллы Көстәре сафында хеҙмәт итә. Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнаша.

1946 йылда Зәйни Рафиҡов запасҡа сыға. Башта Мәләүез эшселәр ҡасабаһында мәктәп директоры булып эшләй. 1948 йылдың сентябрендә район партия комитетының пропаганда һәм агитация бүлеге мөдире итеп тәғәйенләнә. 1947 йылдан алып Стәрлетамаҡ уҡытыусылар институтының тарих бүлексәһендә ситтән тороп уҡый башлай.

1949 йылда запастағы офицер Рафиҡовты яңынан Совет Ҡораллы Көстәре сафына саҡыралар. 1952—1956 йылдарҙа ул В. И. Ленин исемендәге Хәрби-сәйәси академияла уҡып сыға, шунан дивизия, округ, ғәскәри төркөм гәзиттәрендә эшләй, сәйәси хеҙмәткәр һәм хәрби педагог була. 1958—1964 йылдарҙа Венгрия Халыҡ Республикаһында оҙайлы командировкала була. 1970—1989 йылдарҙа Башҡортостан Дәүләт телевидение һәм радио тапшырыуҙар комитетында өлкән инженер, өлкән мөхәррир һәм «Башҡортостан эфиры» гәзитенең яуаплы мөхәррире вазифаларын башҡара.

Әҙәби ижад менән Зәйни Рафиҡов мәктәптә уҡыған йылдарынан алып шөғөлләнә башлай. Ул яҙыусылар һәм журналистар союздары ағзаһы. Бөгөн дә ижади эшен дауам итә. Бынан бер йыл элек ул Мәләүез районы хаҡында «Мәләүезем — ғәзиз ерем» тигән документаль китап сығарҙы. Зәйни Рафиҡов — Мәләүез ҡалаһының почетлы гражданы, Булат Рафиҡов исемендәге премия лауреаты.

**Рәшит НИЗАМОВ,**
яҙыусы.

---

# САФТА ҠАЛЫУ

1970—1989 йылдарҙа отставкалағы офицер Зәйни Рафиҡов Башҡортостан Телевидение һәм радиотапшырыуҙар комитетында граждандар оборонаһы буйынса өлкән инженер, шунан ижтимағи-сәйәси телевидение тапшырыуҙары буйынса мөхәррир, өлкән мөхәррир, «Башҡортостан эфиры» гәзитенең баш мөхәррире булып эшләне. Ул үҙ вазифаларын һәйбәт башҡарҙы. Бының өсөн күп тапҡырҙар рәхмәттәргә һәм дәртләндереү бүләктәренә лайыҡ булды. Бынан тыш, ул йыш ҡына хәрби-патриотик темаларға бик яҡшы теле-радио тапшырыуҙар әҙерләп, эфирға сығарҙы.

***ҺҮРӘТТӘ:*** *Зәйни Рафиҡов (беренсе рәттә, һулдан икенсе) Комитеттың запастағы, отставкалағы хәрби хеҙмәткәре, журналистары менән. 1998 йыл.*

1965—1969 йылдарҙа Зәйни Рафиҡов Өфө ҡалаһы хәрби гарнизонының марксизм-ленинизм университеты начальнигы булып хеҙмәт итә. Ул унда яҙыусылар менән даими осрашыуҙар ойоштора.

***ҺҮРӘТТӘ:*** *Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәрим менән осрашыуҙан һуң.*

---

Зәйни Рафиҡовтың шиғырҙарының күпселеге мылтыҡлы кешеләргә бағышланған. Әммә шуныһы ҡыуандыра: уның әҫәрҙәренә һалдат сылғауы еҫе ят. Улар ҡолаҡ тондорғос барабан тауышынан да азат. Шағир һалдаттар, сержанттар, офицерҙарҙың да тере кешеләр икәнен, уларға ла үҙ һөнәрҙәре һәм вазифаларына бәйле уйланыуҙар, кисерештәр һәм ынтылыштар хаслығын бер генә минутҡа ла онотмай. Был уға тыуған төйәген, яҡындарын һағыныусы һәм уларҙың именлеге, шат һәм матур тормошо өсөн һәр саҡ дошман менән алышҡа әҙер илһөйәр яугирҙәр образын тыуҙырырға булышлыҡ итә.

# ЗӘЙНИ РАФИҠОВ

## АВТОМАТ ҺӘМ ҠӘЛӘМ

*Өс тиҫтә йыл һалдат булдым.*
*Ҡоралға күнекте ҡулдар.*
*Ер шарына биш билғауға*
*Етә яҙыр уҙған юлдар.*

*Ә яугир сәфәре ауыр:*
*Ил яҙмышы — иң башыңда.*
*Хаҡың юҡ уны ташларға,*
*Әжәл торһа ла ҡаршыңда.*

*Етте ваҡыт —*
*Хәрби сафтан*
*Оҙаттылар мине ялға.*
*Ялмы ни ул — эшһеҙ ятыу*
*Ҡулдар күнеккәс ҡоралға.*

*Тоғро дуҫым автоматты*
*Алмаштырҙым мин ҡәләмгә.*
*Ватанымдың тиңһеҙ күркен*
*Данлау өсөн бар ғәләмгә.*

*Һәм төшөндөм:*
*Был йөктө лә*
*Йөрөтөү түгел аңһаттан.*
*Ихлас әйтәм:*
*Ҡәләм ауыр,*
*Ауыр хатта автоматтан.*

*Тик уны ҡулдан төшөрмәм,*
*Һуңғы һулыш алғанда ла,*
*Ташламағандай ҡоралын*
*Һалдат яуҙа ауғанда ла.*

## УМЫРЗАЯ

*Тойоп иркә ҡояш нурын,*
*Тишеп ҡарҙарҙы,*
*Сыҡҡанһың һин көрт өйөмөнән,*
*Биҙәп ҡырҙарҙы.*

*Үҫәһең тап тыуыр яҙҙың*
*Илсеһе булып,*
*Ҡырау ирей, һинең күркәм*
*Талыңа ҡунып.*

*Һиңә, батыр умырзая*
*Мин сәләм бирәм.*
*Һине яуҙа алда барған*
*Һалдаттай күрәм.*

## ӘЛЛӘ ГӨЛГӘ ҒАШИҠ...

*Аҡтары бар,*
*Күктәй зәңгәрҙәре,*
*Бар алдары, ҡыҙҙар битендәй...*
*Үҫә гөлдәр нәҡ ут һыҙығында —*
*Старт майҙанының ситендә.*

*Хуш еҫлеләр,*
*Сафтар.*
*Ултыралар,*
*Ҡояш нурҙарына күмелеп,*
*Бишектәге сабый бала кеүек,*
*Талғын елгә наҙлы бәүелеп.*

*Сәскәләре ергә йән,*
*Йәм сәсә,*
*Шәфәғендәй яҙғы ал таңдың,*
*Раҫлап йәшәү рәхәт,*
*Гүзәллегең*
*Ҡуйынында тыныс Ватандың.*

*Ә гөлдәрҙән биш аҙымда ғына*
*Ракеталар күккә төбәлгән.*
*Һәм уларҙың ҡорос тәндәренә*
*Мең... миллион әжәл төйәлгән.*
*Дәһшәтлеләр...*
*Шул мөһабәт көйө*
*Халыҡ биргән һалдат ҡулына —*
*Тыуған иле өсөн уттарға ла,*
*Һыуҙарға ла инер улына.*

*Поста саҡта ул үтәргә әҙер*
*Һәр секундта иле ҡушҡанды:*
*Хәтәр кнопкаға ҡыйыу баҫып,*
*Көлөн осорорға дошмандың.*

*...Алышынғас постан,*
*Форсат табып,*
*Егет килә түтәл янына —*
*Әллә гөлгә ғашиҡ,*
*Әллә гөлдәй*
*Ал йөҙлө бер ҡыҙҙы һағына...*

---

Зәйни Рафиҡов шиғыр яҙайым тип шиғыр яҙмай, яҙғандарын бөҙрәләп, семәрләп тормай... Үҙ матурлығына ышанған ҡыҙ, үҙенең әйтер фекеренең хаҡлығына ышанған шағир ғына шулай эшләй ала. З. Рафиҡовтың ижады уҡыусыларҙы битараф ҡалдырмай — уйландыра һәм тулҡынландыра.

**Хәким ҒИЛӘЖЕВ,**
Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты.

**Сердце поэта не знает усталости. – Текст : непосредственный // Путь Октября. – 1998. – 14 октября. – С. 2.**

**Зайнитдин Фасхутдинович Рафиков** (поэтический псевдоним **Зайни Рафиков**) – известный в Башкортостане писатель-журналист. Он автор сборников стихов «Думы солдата» и «Люди в погонах». В этом году издательство «Китап» выпустило его книгу избранных очерков и воспоминаний «Пять шагов в бессмертие».

Зайни Рафиков – наш земляк. Он родился в д. Давлеткулово. Окончил Нурдавлетовскую школу колхозной молодежи (ныне Юлдашевская средняя школа) и Стерлитамакское педагогическое училище, работал учителем в Арслановской и Кутушевской неполных средних школах. С 1940 по 1946 год служил в рядах Вооруженных Сил командиром взвода инженерной разведки, участвовал в Великой Отечественной воине.

В 1946 году, как специалиста народного хозяйства, лейтенанта Зайни Рафикова демобилизовали из рядов армии. И офицера запаса назначают директором Мелеузовской татарской школы. Год спустя он поступает на заочное историческое отделение Стерлитамакского учительского института. В сентябре 1948 года его назначают заведующим отделом пропаганды и агитации Мелеузовского райкома партии. А в ноябре 1949 года З. Рафикова снова призывают в ряды Вооруженных Сил.

Прослужил он до ноября 1969 года. За это время Зайни Рафиков оканчивает журналистский факультет Военно-политической академии им. В. И. Ленина, работает в органах военной печати. В 1958-64 годах находился в длительной командировке в Венгерской Народной Республике.

По утверждению астрологов, люди, рожденные под знаком Рыбы, обладают чутким сердцем и способны ко многим искусствам: музыке, живописи, поэзии.

Глядя на Зайни Рафикова, который появился на свет под этим знаком 75 лет назад, с астрологами нельзя не согласиться. Этот человек обладает сердцем поэта. И кем бы он ни был, чем бы ни занимался – всюду писал стихи, очерки и рассказы. Работая после увольнения в запас в Башкирском республиканском комитете по телевидению и радиовещанию, готовил замечательные теле- и радиопередачи.

Примечательно то, что почти все творчество Зайни Рафикова посвящено воспеванию тяжелого, но благородного труда вооруженных защитников Родины. И оно получило достойную оценку со стороны таких авторитетных знатоков литературы, как лауреата премии им. Салавата Юлаева, народного поэта РБ Р. Гарипова, фронтового журналиста и известного драматурга Габдуллы Ахметшина, лауреата премии им. Салавата Юлаева Хакима Гиляжева и других.

Несмотря на преклонный возраст, Зайни Рафиков и сегодня полон сил, энергии и новых творческих замыслов.

Предлагаем читателям несколько стихов Зайни Рафикова.

***Вечный огонь***

Я стою на берегу Днепра,
В нем вода чиста, как в Агидели,
У могилы, где хранится прах
Тех, кто пал в простреляннных шинелях.
На цветах багряных, как слеза,
Пролитая матерью героя,
Серебрится чистая роса
Утреннею тихою порою.
В этот час, куда ни оглянись –
Синее безмолвие рассвета,
Часовым застывший кипарис
Прям и тонок, как в стихах поэта.
Здесь огонь пылает голубой.
Он, как сердце Данко, вечно светел,
Он, как жизнь. И верно, от того
Я вокруг унынья не заметил.
Спят бойцы. А на краю земли
Зори, словно пламя, полыхают.
Город пробуждается вдали,
Утро это радостно встречая.
…Я на берегу Днепра стою
В глубине задумчивой аллеи…
Так бы мне гореть всю жизнь свою,
Щедрым сердце вечно пламенея.
*Киев, 1955 г. (Перевод Г. Шафикова).*

***Жене***

Есть у друзей очаг семейный –
Уютный, теплый уголок.
А я мечтать о нем не смею,
Мой кров от Родины далек.
Живу с тобою, где придется –
Сегодня здесь, а завтра там.
Грущу, пол-жизни на колесах
По дорогим душе местам.
Во всем удобства отвергая,
Судьбы военной не кляня,
Ты, неотступно, дорогая,
Как счастье, около меня!
Бывает хлопотно и все же:
К себе пощады никакой –
Мне на земле всего дороже –
Любимой Родины покой!
А угол? Он всегда найдется,
Мне не отказывали в нем –
И для меня пылает солнце
Неугасающим огнем!
Есть в сердце радости приливы,
Любви достаточно вполне.
Была бы Родина счастливой –
Другой судьбы не надо мне!
*(Перевод И. Измайловского).*

***Маки***

Вянут маки, тронутые холодом.
Вянут маки… Это не беда!
Мы смеемся радостно и молодо,
Нас еще не трогают года.
Но идет неумолимо лето
К грустному осеннему концу…
Нам к лицу холодные рассветы,
И морщины тоже нам к лицу.
Только чувства – нет, не постареют,
Им светиться и гореть в крови,
Если в сердце с молодости рдеют
Маки неистраченной любви.
*(Перевод А. Филиппова).*

***Буран***

Снег редко-редко выпадает.
Он здесь,
Теряя высоту,
Не долетая,
Тает,
Тает.
И умирает на лету.
И вдруг сегодня,
Приосанясь,
Хозяйкой к нам пришла зима.
Ах, где вы,
Сани,
    Сани,
        Сани –
Зимы родимой кутерьма.
Я ей навстречу выбегаю
И обнимаю,
      Словно мать,
Ее дыхание вбираю,
Побольше норовлю вобрать.
Оно студено,
    То дыхание,
Которое пришло послом…
  А от родной земли посланье
Всегда является с теплом.
*(Перевод Р. Хакимова)*

Коллеги, предлагаем вам для использования при подготовке мероприятий копии статей из республиканских и местных газет о Зайни Рафикове на башкирском языке.

## Зәйни РАФИҠОВҠА — 80 йәш

***Зәйни ағай Рафиҡов менән ҡайҙа ғына осрашма, йөҙөнә сыҡҡан ихласлығы, ҡолас йәйеп йылмайып килеүе шунда уҡ арбап ала, үҙенә йәлеп итә. Тиҫтәләрсә йылдар дауамында ағайыбыҙҙы асыҡ һәм алсаҡ ҡиәфәттә күреүгә күнегеп-өйрәнеп бөткәнбеҙ. Һәр саҡ хәрбиҙәрсә ыҫпай, ҡупшы йөрөүенә лә иғтибар итмәйенсә булмай. Ҙур тормош тәжрибәһе туплаған, донъяның утын-һыуын үткән ағайҙың аҡыллы кәңәштәре күңелгә ятышлы, фәһемле, уйландырырлыҡ.***

# Ихлас һүҙ көсө

Зәйни Рафиҡовтың ижадта һаң һәм күләм артынан ҡыумауы, әйтһә, һәр саҡ берәгәйле, һалдаттарса сәпкә бәреп әйтеүе, тура һүҙлелеге, һәр саҡ хәҡиҡәтте раҫлауы — уның йәшәйеш булмышының да, ижад асылының да төп сифатылыр, моғайын. Тормоштоң әсе-сөсөһөн татыған, яҙмышын үҙе яһаған, заман һандалында сыныҡҡан кешенең әйткәне аҡһаҡал һүҙе булып ҡабул ителә. Шуға ла уның менән осрашыу күңелле, фекер алышыу фәһемле. Бай тормош юлы, сағыу биографияһы күптәрҙе көнләштерерлек Зәйни ағайҙың. Ижад сығанағы ла үҙе күргән, үҙе кисергән, үҙ башынан үҙған хәлваҡиғаларға нигеҙләнә.

Зәйни Рафиҡов (Зәйнетдин Фәсхетдин улы Рафиков) 1923 йылдың 11 мартында бай тарихлы Мәләүез районының Дәүләткол ауылында тыуа. Бәләкәйҙән атайһыҙ ҡала, яҙмыш уға төрлө һынауҙы тыумыштан әҙерләп ҡуя. Ауырлыҡтарға ҡарамаҫтан, малай уҡыуын ташламай, 1937 йылда Нурдәүләт тулы булмаған урта мәктәбен, 1940 йылда Стәрлетамаҡ башҡорт педагогия училищеһын тамамлап, тыуған яғына уҡытыусы булып ҡайта. 1940–1946 йылдарҙа Совет Армияһы сафында хеҙмәт итә, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнаша, Көнсығышта япон самурайҙарын ҡыйратыуҙа батырлыҡтар күрһәтә.

1946 йылдың көҙөндө З. Рафиҡов армиянан ҡайтып, Мәләүез районында мәктәп директоры, партия райкомында бүлек мөдире булып эшләй, ситтән тороп Стәрлетамаҡ уҡытыусылар институтының тарих бүлегендә уҡый. 1949 йылдың көҙөндө уны яңынан Совет Армияһы сафына алалар. 1952–1956 йылдарҙа З. Рафиҡов Ленин исемендәге хәрби-сәйәси академияның журналистика факультетында уҡый. Уны тамамлағас, дивизия, округ һәм ғәскәрҙәр төркөмө гәзиттәрендә эшләй, үҙен ысын хәрби педагог-журналист итеп таныта. 1958–1964 йылдарҙа хәрби журналист Венгрия Халыҡ Республикаһына оҙайлы командировкаға ебәрелә.

Унда ул һалдат тормошо, хәрби хеҙмәт хаҡында шиғырҙар яҙыу менән бергә туғандаш мадьяр халҡының әкиәттәрен башҡортсаға туранан-тура тәржемә итә башлай, һәм 1963 йылда уларҙы атаҡлы ғалим Жәлил Кейекбаев менән бергәләп айырым китап итеп баҫтырып сығаралар.

Зәйни Рафиҡов 1964–1969 йылдарҙа Өфө гарнизонының киске хәрби марксизм-ленинизм университетының начальнигы булып хеҙмәт иткән осорҙан уны яҡшы беләм. Беҙҙе, Башҡорт дәүләт университетының яҙышып йөрөгән студенттарын, уның менән Булат Рафиҡов һәм Миәссәр Басиров таныштырҙы. Артабан беҙ Офицерҙар йортона йыш йөрөй башланыҡ, унда һирәк-мирәк булһа ла Башҡортостандың хәрби комиссариҡәнеңә ышандым, — тине ҡарт, мут йылмайып.

Артабан ул үҙенең беҙҙең тарафтарҙан сығып киткән эмигрант булыуын берсә үкенгәндәй, берсә ҡыуанғандай итеп һөйләне.

Венгрияла хеҙмәт иткәндә Зәйни Рафиҡов, урындағы халыҡ менән аралашып, мадьяр телен ярайһы нығлап өйрәнә, алда телгә алған әкиәттәр китабын әҙерләй. Мадьяр халҡының башҡорттар менән туғанлығы ла унда ҙур кыҙыҡһыныу тыуҙыра.

Зәйни Рафиҡовтың венгр телен белеүенә бер мәл үҙебеҙ ҙә шаһит булдыҡ.

1993 йылдың июнендә Венгрия Президенты, күренекле венгр драматургы Арпад Генц үҙенең ялында, Владивостоктан көнбайыш сиккә саҡлыуы поезда сәйәхәт яһағанда, Өфөлә тукталып китте. Сәйәхәт программаһында башҡорт яҙыусылары менән осрашыу ҙа планлаштырылғайны. Ул саҡта мин Яҙыусылар союзында художестволы әҙәбиәтте пропагандалау бюроһы директоры инем. Динис Бүләков — идара рәйесе. Арпад Генцты ҡаршыларға әҙерләнеү күпкә алда башланды.

Президент кортежы Яҙыусылар йортона килеп тукталғанда, беҙ уны ишек алдына сығып көтә инек. Арабыҙҙа Зәйни Рафиҡов та бар ине, әлбиттә. Президент һәр беребеҙ менән ҡул биреп күреште. Шунда Зәйни ағай, венгрса иҫәнләшеп, уға тағы ла нимәлер әйтеп өлгерҙө.

— Владивостоктан Өфөгә хәтлем килгәндә, беренсе ҡабат саф венгрса һүҙ ишеттем, ундай яҙыусығыҙ менән ғорурланығыҙ, мин бер нисә йыл венгрсаны онотмаҫҡа тырышам, — тине ул.

Зәйни ағай Венгрияға ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә ике тапҡыр барып ҡайтҡан. Беренсе тапҡыр 1956 йылдың көҙөндә Венгрияла контрреволюцион ихтилал ҡупҡанда, икенсе тапҡыр 1958 йылдың мартында Венгрия Халыҡ Республикаһының Конституцияһын тергеҙеү буйынса Венгрияла хеҙмәт иткән хәрби журналистарҙы ҡайтарып алғанда. Ул ваҡытта Венгрияла Зәйни ағайҙың ҡатыны Фәрзәнә Ғәбдрәхим ҡыҙы Рафикова ла эшләй. Ул Венгрияла Мәскәү радиоһының венгр редакцияһында диктор булып эшләгән. Ҡатыны менән Зәйни ағай Венгрияла ике ҡыҙын тыуҙырған.

Ҡайтҡас, Зәйни ағай Өфөлә Башҡортостан радиоһында венгр редакцияһын ойоштора. Ул редакцияла Фәрзәнә Рафикова, Ғәзиз Ғәбитов, Ғәзиз Ғәлиев

*Яҙыусы һәм журналист Зәйни Рафиковҡа - 80 йәш*

# ИЖАДИ ПЛАНДАР МЕНӘН ЙӘШӘЙ

Зәйни (Зәйнетдин) Фәсхетдин улы Рафиҡов 1923 йылдың 11 мартында Мәләүез районының Дәүләткол ауылында крәҫтиән ғаиләһендә тыуа. Ун беренсе йәше киткәс атайһыҙ ҡала, тик уҡыуын ташламай. 1937 йылда Нурдәүләт тулы булмаған урта мәктәбен (бөгөнгө Советтар Союзы Геройы Зөбәй Үтәғолов исемендәге Юлдаш урта мәктәбе), ә 1940 йылда Стәрлетамаҡ педагогия училищеһын тамамлай. 1939 - 1940 уҡыу йылында Арыҫлан, 1940 - 1941 йылдарҙа Котош тулы булмаған урта мәктәптәрендә уҡытыусы һәм өлкән пионер вожатыйы булып эшләй. 1940 - 1946 йылдарҙа Ҡораллы Көстәр сафында хеҙмәт итә, империалистик Японияның Квантун армияһын тар-мар итеүҙә ҡатнаша, инженер разведкаһы командиры була.

1946 йылдың көҙөндә Зәйни Рафиҡов хәрби сафтан демобилизациялана. Башта Мәләүез татар мәктәбе директоры, һуңынан Мәләүез районы партия комитетының пропаганда һәм агитация бүлеге мөдире булып эшләй, ситтән тороп Стәрлетамаҡ педагогия институтының тарих бүлегендә уҡый. 1949 йылдың көҙөндә яңынан Ҡораллы Көстәр сафына сақырыла.

1952-1956 йылдарҙа офицер З. Рафиҡов В. Ленин исемендәге хәрби-сәйәси академияның журналистика факультетында уҡый, уны тамамлағас, дивизия, округ һәм ғәскәрҙәр төркөмө гәзиттәрендә эшләй, хәрби педагог булып хеҙмәт итә. 1958-1964 йылдарҙа Венгрия Халыҡ Республикаһында оҙайлы командировкала була.

Әҙәби ижад менән Зәйни Рафиҡов Нурдәүләт тулы булмаған урта мәктәбендә шөғөлләнә башлай. Ә Стәрлетамаҡ педагогия училищеһында уҡығанда атаҡлы шағир Хөсәйен Ҡунаҡбаев етәкселек иткән «Иҙаш көстәр» әҙәби түңәрәгенең әҙәм ағзаларының береһе була, ике йылға яҡын уҡыу йортоноң «Сатирик бюллетень» тигән стена гәзитен редакторлай.

Армияла хеҙмәт иткән көсөргәнешле йылдарҙа, өҫтәүенә әҙәби мөхиттән ситтә булыу арҡаһында йәш һәүәҫкәр шағир ижад менән әүҙем шөғөлләнә алмай, әммә тыуған яҡтарға ҡайтып үҙе кеүек яҙыусылар менән аралашып йәшәй башлағас, ҡулына яңынан ҡәләм ала. Бер-бер артлы уның шиғырҙары гәзит һәм журнал биттәрендә донъя күрә. Хәрби-сәйәси академияны тамамлап, журналист булып эшләү уның ижади ҡомарын арттыра.

1960 йылда Зәйни Рафиҡовтың «Һалдат уйҙары» тигән тәүге шиғырҙар йыйынтығы донъя күрә, 1975 йылда «Йондоҙло кешеләр» исемле китабы баҫылып сыға. Олоғая бара, яҙыусы сәсмә әҫәрҙәр яҙыу менән мауыға башлай. Көндәлек матбуғатта уның Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм илебеҙҙең күренекле шәхестәре хаҡындағы очерктары йыш ҡына баҫыла. 1998 йылда Зәйни Рафиҡовтың «Үлемһеҙлеккә биш аҙым» исемле очерктар һәм хәтирәләр йыйынтығы уҡыусылар иғтибарына тәҡдим ителә. 1963 йылда Зәйни Фәсхетдин улы профессор Жәлил Кейекбаев менән бергәләп «Мадъяр халыҡ әкиәттәре»нең башҡортсаға тәржемә ителгән йыйынтығын сығарҙы.

1998-2000 йылдарҙа төҙөүсе, баш мөхәррир һәм күп материалдар авторы сифатында яҙыусы «Мәләүезем - изге ерем: үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге» тигән тарихи-мәғлүмәт йыйынтығы өҫтөндә эшләй. Был китапты Мәләүез районы һәм ҡалаһы уҡыусылары хуплап ҡаршы алды. Күптән түгел автор Башҡортостан «Китап» нәшриәтенә үҙенең «Улар иртәгәгә атланы» тигән яңы очерктар һәм иҫтәлектәр йыйынтығын тапшырҙы.

Зәйни Рафиҡов Рәсәй Федерацияһының һәм Башҡортостан Республикаһының яҙыусылар һәм журналистар союзы ағзаһы, Мәләүез ҡалаһы һәм районының Почетлы гражданы, Булат Рафиҡов исемендәге премия лауреаты. Һуғыш һәм хеҙмәт ветераны, отставкалағы полковник Зәйни Рафиҡов бөгөн дә яңы ижади пландар менән йәшәй. Уҡыусылар иғтибарына уның бер нисә шиғырын тәҡдим итәбеҙ.

**Һүрәттә:** Зәйни Рафиҡов.

❀

## *Зәйни Рафиҡов*

### Автомат һәм ҡәләм

*Сирек быуат һалдат булдым,*
*Ҡоралға күнекте күлдар.*
*Ер шарына биш билғауға*
*Етә яҙыр уҙған юлдар.*
*Ә яугир сәфәре ауыр -*
*Ил яҙмышы иң башында.*
*Уны ташларға хаҡың юҡ,*
*Әжәл торһа ла ҡаршыңда.*
*Еттә~~-егет~~*
*Хәрби сафтан*
*Оҙаттылар мине ялға.*
*Ялмы ни ул эшһеҙ ятыу,*
*Күлдар күнеккәс ҡоралға.*
*Тоғро дуҫым автоматты*
*Алмаштырҙым мин ҡәләмгә,*
*Ватанымдың тиңһеҙ күркен*
*Данлау өсөн бар ғәләмгә.*
*Һәм төшөндөм:*
*Был йөктө лә*
*Йөрөтөү түгел анһаттан.*
*Ихлас әйтәм:*
*Ҡәләм ауыр,*
*Ауыр хатта автоматтан.*
*Тик уны ҡулдан төшөрмәм*
*Һуңғы һулыш алғанда ла,*
*Ташламағандай ҡоралын*
*Һалдат, яуҙа ауғанда ла.*

❀

### Кәкүк, кәкүк...

*Бала саҡта мин кәкүктән*
*Һорай инем, сағырһа ул:*
*«Һана әле ашыҡмайса,*
*Минең ғүмерем нисә йыл?»*
*Йәштән таныш ҡош тауышын*
*Әрәмәһендә Дунайҙың*
*Бөгөн тағы ишеттем дә*
*Әллә нимәгә моңайҙым.*
*Тик был юлы ғүмеремде*
*Юрауҙы артыҡ күрҙем.*
*Үҙем дә һиҙмәҫтән ҡошҡа*
*Икенсе бер һорау бирҙем:*
*«Кәкүк, кәкүк!*
*Һин әйт әле,*
*Һуҙмайынса бик оҙаҡҡа,*
*Нисә аҙна, нисә көндән*
*Мин ҡайтырмын тыуған якҡа?!»*

# Очерктар оҫтаһы



Фәлим ДӘҮЛӘДИ

Алтмышынсы йылдарҙың башында республикабыҙҙың гәзит-журналдары биттәрендә капитан Зәйни Рафиҡов ҡултамғаһы аҫтында йыраҡ Венгрия Халыҡ Республикаһының баш ҡалаһы Будапештан ебәрелгән очерктар баҫыла башланы. Улар тиҙ арала уҡыусыларҙың иғтибарын йәлеп итте. Ә журналистарҙың очерк жанрына бағышланған бер кәңәшмәһендә Зәйни Рафиҡовтың ижады баһа ла алды. Уны Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында фронт гәзиттәрендә хеҙмәттәшлек иткән үткер ҡәләмле публицист һәм яҙыусы-драматург Ғабдулла Әхмәтшин бирҙе. Кәңәшмәлә ҡатнашыусыларға мөрәжәғәт итеп:

— 1957 йылда Көньяҡ Урал хәрби округы гәзите "Боевое знамя"ла ижади командировкала булғанда миңә Зәйни Рафиҡов менән ҡатнашып йәшәргә һәм эшләргә тура килде. Ул хәрби-сәйәси академияның журналистика факультетын тамамлаған белгес. Бөтә гәзит-журнал жанрҙарында ла уңышлы сығыш яһай. Башҡорт егете рус телендә бик нәзәкәтле яҙа. Гәзит уҡыусылар араһында киң танылыу яуланы...

Алтмышынсы йылдарҙың уртаһында яҡташыбыҙ хәрби хеҙмәтен дауам итеү өсөн Өфө ҡалаһына ҡайтты. Гәзит-журналдарҙа, радио һәм телевидение аша республикабыҙҙың Бөйөк Ватан һуғышы фронттарында ҡаһарманлыҡ күрһәткән улдары һәм ҡыҙҙары тураһында тапшырыуҙар алып барҙы.

З. Рафиҡов ҙәвенең очерктарында сағыу образдар тыуҙырыуға өлгәште. Әммә журналист һәм яҙыусының ижады тағы бер яғы менән иғтибарға лайыҡ. Ул фашизмды еңеүгә тос өлөш индергән, ләкин йоғонтоло хәрби даирәләрҙә йыш осраусы көнсөллөк һәм башҡа кире күренештәр арҡаһында эшмәкәрлектәре тейешле баһа алмаған һәм исемдәре билдәһеҙ ҡалған шәхестәрҙе эҙләп табырға, уларҙың ҡаһарманлығы һәм фиҙакәрлеге тураһында халыҡҡа дөрөҫөн асып һалырға ынтыла.

Әйтәйек, "Империя канцелярияһын алғанда" тигән очеркында автор Бөйөк Ватан һуғышының беренсе көнөнән аҙаҡҡы сәғәтенә тиклем алғы һыҙыҡта булған, хәл иткес операцияларҙа ҡатнашҡан, фашизмдың өңө Берлиндың икенсе һанлы объекты тип аталған империя канцелярияһын (беренсе һанлы объект — рейхстаг) алыуҙа үҙенең полкы менән төп ролде уйнаған Баймаҡ районы егете подполковник Исхаҡ Иҙрис улы Ғүмәровтың колоритлы образын тыуҙыра. "Рейхстаг түбәһендә — Еңеү байрағы" тигән очеркында журналист оҙаҡ йылдар буйы беренсе байраҡты фашистик дәүләттең парламенты ҡыйығына М. Егоров менән М. Кантария ҡаҙаны тигән ялған легенданы фаш итә. Ул был тарихи актты капитан Владимир Маков етәкселек иткән өлкән сержанттар Ғизи Заһитов, Алексей Бобров, Александр Лишменко һәм сержант Михаил Минин төркөмө ғәмәлгә ашырыуын раҫлай.

Тыңғыһыҙ шәхес булараҡ, Зәйни Рафиҡов бөгөн дә ҡул каушырып ултырмай. Ул гвардия генерал-майоры Миңлеғәли Шайморатовҡа бағышланған документаль повесть өҫтөндә эшләй. Яҙыусының эш өҫтәлендә яңы шығырҙар шәлкеме, архивтан табылған ҡыҙыҡлы фактлар күсермәләре ята.

# Шағир йондоҙҙары

Ихсан ӘХТӘМИӘНОВ

Ул былай ҙа йондоҙҙан мәхрүм кеше түгел. Зәйни Рафиҡов, хәрби хеҙмәтен дауам итергә Башҡортостанына ҡайтҡанда, уның иңбаштарында икешәр йондоҙло алтын погондар балҡый ине, ә күкрәк кеҫәһендә — "Һалдат уйҙары" тигән шығыр китабы. Уның биттәрендә күңел йондоҙҙары теҙелгән. Шағир үҙен әле һаман һынмаҫ һуғышсы итеп тоя, ошо кисерештәр уға илһам, ҡеүәт бирә.

*Тоғро дуҫым — автоматым*
*Алмаштырҙым мин ҡәләмгә,*
*Ватанымдың тиңһеҙ күркен*
*Данлар өсөн бар ғәләмгә.*
*Һәм төшөндөм:*
*Был йөктө лә*
*Йөрөтөү түгел һис аныҡтан.*
*Ихлас әйтәм:*
*Ҡәләм ауыр,*
*Ауыр хатта автоматтан.*

Шағир-һалдат автоматтан ауыр ошо изге йөктө иңенән, дөрөҫөрөгө, илһам ҡанатынан төшөрмәйенсә, йылдар аша алып килә. Илаһи ынйылары халҡы күңеленә рух орлоғо булып һибелә.

Атайсалының шифалы һауаһына, яҡташтарының яғымлы ҡарашына сарсап ҡайтҡан ир-егеттең ошо оло хистәре ҡайнар йөрәгенән һағышлы моң-йыр булып ҡойола.

Уны тиҫтер егеттәренең, яҡташ һәм яуҙаш дуҫтарының яҙмышы бигерәк ныҡ тулҡынландыра.

*Бергә инек, берҙәм инек,*
*Беҙҙе һуғыш айырҙы.*
*Ил яҙмышы, утлы юлдар*
*Төрлө яҡҡа ҡайырҙы.*
*Бына бөгөн юлдар беҙҙе*
*Осраштырҙы тағы ла.*
*Шатлыҡтан килә йырлағы,*
*Аҙ ғына илағы ла...*

Венгрияла оҙаҡ хеҙмәт иткән башҡорт егете мадьяр ер-һыуына нисек кенә эйәләшмәһен, полкташ дуҫтарын, редакциялағы ҡәләмдәштәрен нисек кенә яҡын итмәһен, күңеле менән Тыуған иленә тартыла, шул тойғоларынан минутҡа ла айырыла алмай.

— *Ҡал! — тинеләр дуҫтар...*

*Тик тҙмәнем,*
*Һиңә ҡайттым,*
*Һиңә ҡайттым,*
*Илем,*
*Ҡалманым.*
*Һин минһеҙ ҙә йәшәй алаһың да,*
*Ә мин һинһеҙ йәшәй алмайым.*

Үҙ ерендә, тыуған төйәгендә шағир киләсәген, яҙмышын таба. Шығырҙарының да өр-яңылары, рухи донъяһына яҡыныраҡтары ярала. Мәхәббәттең дә йөрәгендә һүнмәҫлеге тоҡана. "Башҡорт ҡыҙына" тигән шығыр, минеңсә, ошо уйҙарымды дәлилләй ҙә инде.

*...Ҡәҙерен бел ошо ҙур бәхеттең,*
*Һиңә ҡарап,*
*Донъя таң ҡалһын,*
*Горурланһын Урал — туған атаң.*
*Аҡһеләк — әсәң — маҡтаһын.*

Шағирҙың бөгөн етмеш бише тулыуға һис ышанғы килмәй. Сөнки ул һаман әле йәш ир-егеттәрсә дәртле һәм илһамлы. Уның ярһыу йөрәге ялҡынында яралған шиғри йондоҙҙар үҙ замандаштарының ғына түгел, йәш быуындың да рухи донъяһын балҡытыр әле.

Башкортостан. – 1998. – 12 марта.

## *Интернет-ресурсы*

Уникальные записи из фонда башкирского радио. В фонотеке радио «Юлдаш» хранятся голоса более двадцати поэтов-участников ВОВ, это записи нескольких сотен стихов и поэм. Именно они легли в основу видеороликов, премьера которых приурочена празднику Победы. В съемках принимали участие актёры башкирской драмы, журналисты, школьники.

**Зайни Рафиков**

https://bash.news/bst/yaugir-huze-slovo-poeta/117721-zayni-rafikov

Зайни РАФИКОВ. Сын бога войны. Джигит-беркут.

http://belsk.ruspole.info/node/2212

Зайни Рафиков. Личный враг Адольфа Гитлера.

https://warhistory.livejournal.com/69617.html

**Содержание**


| | |
|---|---|
| Предисловие | 3 |
| Страницы жизни и творчества Зайни Рафикова | 4 – 5 |
| Воин с сердцем поэта | 5 – 7 |
| Зайни Рафиков – певец родного края | 7 – 8 |
| Сердце поэта не знает усталости | 11 – 14 |
| Статьи из газет о Зайни Рафикове | 15 – 17 |
| Интернет-ресурсы | 18 |